Муниципальное бюджетное общеобразовательное учреждение
«Средняя общеобразовательная школа села Бугульчан
муниципального района Куюргазинский район
Республики Башкортостан»

СОГЛАСОВАНО
Зам.директора по УВР:
Григоренко С.В. _________
«____»______________ 2020 г.

УТВЕРЖДАЮ
Директор МБОУ СОШ с.Бугульчан
Юсупова А.З. ___________________
Приказ № ___ от «___»________ 2020 г.

Рассмотрено на ШМО учителей
Социально-гуманитарного цикла
Руководитель ШМО
Яппарова З.Р.______________
Протокол №__ от «__» _______ 2020г.

**РАБОЧАЯ ПРОГРАММА**

**по башкирскому (государственному) языку для 5 класса**

**Составила:**
Мурзагулова Г.Н.,
Учитель башкирского языка
первой квалификационной категории.

Для реализации рабочей программы используется УМК
З.М.Габитовой, М.Г.Усмановой. – Уфа, Китап, 2020

Бугульчан - 2020

## 1.Уҡыу предметын өйрәнеүҙең һөҙөмтәләре.

## Шәхси һөҙөмтәләр

Башҡорт телен 5-се класта өйрәнеүҙең шәхси һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә: донъяны күп телле һәм мәҙәниәтле йәмғиәт булараҡ ҡабул итеү; үҙеңде илдең гражданины итеп тойоу; телде (шул иҫәптән башҡорт телен) төп аралашыу сараһы булараҡ ҡабул итеү; башҡорт теле саралары ярҙамында (балалар фольклоры, балалар әҙәбиәтенең ҡайһы бер үрнәктәре) уҡыусының башҡорт халҡының тормошо менән танышыуы.

## Метапредмет һөҙөмтәләр

Уҡыусының коммуникатив һәләттәрен үҫтереү; элементар коммуникатив мәсьәләне сисеү өсөн адекват тел һәм телмәр сараларын һайлау һәләтен үҫтереү;
уҡыусының танып белеү һәм эмоциональ сфераларын үҫтереү; башҡорт телен өйрәнеүгә мотивация булдырыу;
уҡытыу-методик комплекстың төрлө компоненттары (дәреслек, аудиодиск һ.б.) менән эшләргә өйрәтеү.

**Предмет һөҙөмтәләре**

башҡорт теле нормалары (фонетик, лексик, грамматик) тураһында башланғыс класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау, белешмә биреү; (курс йөкмәткеһе кимәлендә)

**А. Коммуникатив сферала (башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ өйрәнеүҙә)**

**<u>Телмәр эшмәкәрлегенең түбәндәге төрҙәрендә телмәр компетенцияһы:</u>**

***һөйләү телмәрендә:***

- аралашыуҙың типик ситуацияларында элементар этикет диалог алып барыу;
- элементар кимәлдә уҡыусының үҙе, ғаиләһе, дуҫы тураһында һөйләүе; предмет, картинаны һүрәтләүе; персонажды ҡыҫҡаса ҡылыҡһырлауы;
- уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен тыңлап аңлауы; аудиояҙмаларҙағы текстарҙың йөкмәткеһен аңлауы;

***уҡыуҙа:***

өйрәнелгән тел материалына таянып төҙөлгән текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;
өйрәнелгән тел материалы менән бер рәттән яңы һүҙҙәрҙе лә үҙ эсенә алған текстарҙы эстән уҡыу һәм уларҙың төп йөкмәткеһен аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу;

***яҙма телмәрҙә:***

яҙыу техникаһына эйә булыу;
бер телдән икенсе телгә тәржемә итә белеү;
үрнәк буйынса байрам менән ҡотлау һәм ҡыҫҡа шәхси хат яҙыу.

**<u>Тел компетенцияһы (тел сараларын үҙләштереү).</u>**

- башҡорт теленең өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм айырыу; һүҙҙәргә һәм фразаларға дөрөҫ баҫым ҡуйыу;
- төрлө һөйләм төрҙәрен интонация менән уҡыу;
- башланғыс мәктәп курсында өйрәнелгән уҡыу һәм орфографик ҡағиҙәләрҙе ҡабатлау, ҡулланыу;
- лексик берәмектәрҙе (һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, баһалау лексикаһы, телмәр клишелары) һәм грамматик күренештәрҙе таныу һәм телмәрҙә ҡулланыу.

**<u>Социомәҙәни компетенция.</u>**

- географик атамаларҙы, билдәле балалар әҫәрҙәренең персонаждарын, популяр әкиәттәрҙең сюжеттарын, балалар фольклорының әҫәрҙәрен (шиғырҙар, йырҙар) белеү;

**Б. Танып белеү сфераһы:**

- айырым өндәр, хәрефтәр, һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, ябай һөйләмдәр кимәлендә башҡорт һәм рус телдәренең күренештәрен сағыштыра белеү;
өлгө буйынса күнегеүҙәр эшләй белеү, тәржемә итә белеү;
- ҡағиҙәләр, таблицаларҙы ҡуллана белеү;

**В. Дөйөм ҡиммәттәргә йүнәлеш сфераһында:**

башҡорт телен фекер, хис-тойғо, эмоцияларҙы белдереү сараһы булараҡ ҡабул итеү;
балалар фольклоры ярҙамында башҡорт халҡының рухи ҡиммәттәрен үҙләштереү.

**Г. Эстетик сферала:**
башҡорт телендәге хис-тойғо һәм эмоцияларҙы белдереүсе сараларҙы үҙләштереү;
балалар әҙәбиәте үрнәктәре менән танышҡанда матурлыҡты таныҒа өйрәнеү.
**Д. Хеҙмәт сфераһында:**
- уҡыу процесында билдәләнгән планға ярашлы эшләй белеү.

## 2.Уҡытыу предметының төп йөкмәткеһе.

**Һаумы, мәктәп! (5сәғ.)** Кемдеке? Кемдең? Нимәнең? Һорауҙарына яуаптар. Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу. Көн режимы,таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ. Класта дуҫлыҡ, берҙәмлек, тураһында һөйләшеүҙәр,әҫәрҙәр уҡыу.

**Үҙем тураһында (6 сәғ.)**
Был теманы үҙләштереү барышында уҡыусы үҙе тураһында,үҙенең ғаилә ағзалары, яҡындары тураһында һөйләргә өйрәнергә тейеш. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше. Алмаш. Зат алмаштары. Зат алмаштарының килеш менән үҙгәреше. к-г,ҡ-ғ тартынҡыларының сиратлашыуы.
**Проект эше «Беҙҙең ғаилә»**

**Йыл миҙгелдәре (4 сәғ.)**
Йыл миҙгелдәре, һәр йыл миҙгеленә хас үҙенсәлектәр менән танышыу. Йыл миҙгелдәрен, һәр миҙгелгә ҡараған ай исемдәрен дөрөҫ әйтә һәм телмәрҙә ҡуллана белеү. Һорау алмаштары.Күрһәтеү алмаштары. Күрһәтеү алмаштарының килеш менән үҙгәреше. Билдәһеҙлек алмаштары. Билдәләү алмаштары.
**Башҡортостанды беләһеңме? (6 сәғ)**
Уҡыусыларҙы үҙҙәре йәшәгән республиканың үткәне, бөгөнгөһө, киләсәге менән таныштырыу. Уҡыусы аңына үҙе йәшәгән ерҙең – Башҡортостандың тарихы, уның байлығы, күренекле шәхестәре һ.б. хаҡында бер бөтөн тыуҙырыу һәм ул турала һөйләй белеүҙәренә өлгәшеү. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Юҡлыҡ алмаштары.
**Проект эше «Өфө ҡалаһы»**

**Кеше. Тән ағзалары.Шәхси гигиена (5 сәғ.)**
Был тема кешенең тән ағзалары, эске ораандарының атамаларын белеү менән бергә шәхси гигиена, көн тәртибе, һаулығы менән берлектә алып барыла. Кешегә һау-сәләмәт булыу өсөн нимә эшләргә кәрәклеге тураһында әңгәмәләр үткәреү, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт телендә эйәлек төшөнсәһе. Ҡылым.

**Кейем-һалым. Магазин. Өй. Баҙар (2 сәғ.)** Башҡорт телендә нәҙек һәм һәм ҡалын ялғауҙар. Башҡорт өндәрен, һүҙҙәрен дөрөҫ әйтеү күнекмәләрен камиллаштырыу. Кейем исемдәрен үҙләштереү, элек өйрәнгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Кейемде һаҡлап, ҡәҙерләп тотоу, һәр берәһен үҙ урынына ҡуйыу. Кейем һәм шәхси гигиена. Кейем һәм матурлыҡ, тыйнаҡлыҡ тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Шиғырҙар ятлау. Аҙыҡ-түлек, кейем-һалым атамаларын өйрәнеү, һатып алыу этикеты менән таныштырыу, һөйләшергә, аралашырға өйрәтеү. Синоним.

**8 март – ҡатын-ҡыҙҙар көнө (2 сәғ.)**
Әсәй тураһында шиғыр, хикәйәләр уҡыу. Әсәйҙең донъяла иң ҡәҙерле кеше икәнен, уны ихтирам итергә, яратырға, ҡәҙерләргә кәрәклекте аңлатыу. Был тема ғаилә темаһы менән берлектә бара, шуның өсөн алдағы кластарҙа үтелгән ғаилә темаһы ҡабатлана. ҡотлау открыткалары яҙырға, ҡотлау һүҙҙәрен әйтә белергә өйрәтеү. Антоним.
**Проект эше « Минең әсәйем»**

**Яҙ етте (4 сәғ.)**
Яҙ билдәләрен күрә һәм яҙ миҙгеленең үҙенсәлектәрен әйтә белергә өйрәтеү. 1 май, 9 май байрамдары, дуҫлыҡ тураһында һөйләшеү. Омоним**.**

Яҙғы эштәр, яҙғы баҡса эштәре,баҫыу эштәре тураһында һөйләшеү. Һан. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Башҡорт халҡының, Башҡортостанда йәшәүсе башҡа халыҡтарҙың яҙғы тәбиғәт менән бәйле ғөрөф-ғәҙәттәре һәм матур йолалары тураһында һүҙ алып барыла. Уҡыусыларға уларҙың кеше тормошондағы әһәмиәте, мәғәнәләрен, уларҙы тергеҙеү кәрәклеген еткереү. Грамматика буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау.

**Коммуникатив оҫталыҡтар.**

**Һөйләү телмәре**

***1. Диалогик форма:***

- типик ситуацияларҙа диалог алып барыу;
- һорау-яуап рәүешендәге диалог.

***2. Монологик форма:***

- телмәрҙең төп коммуникатив төрҙәрен (тасуирлау, хикәйәләү, ҡылыҡһырлау) ҡулланыу.

**Тыңлап аңлау**

- уҡыусының уҡытыусы һәм класташтарының телмәрен аңлауы;
- өйрәнелгән тел материалына таянып эшләнгән аудиояҙмалағы текстарҙы аңлау.

**Уҡыу**

- башҡорт теле материалына таянып эшләнгән текстарҙы ҡысҡырып уҡыу;
- өйрәнелгән материалды һәм бернисә яңы һүҙҙе үҙ эсенә алған тексты эстән уҡыу һәм аңлау, текстан кәрәкле информацияны табыу, тәржемә итә белеү (персонаждарҙың исемдәре, географик атамалар һ.б.).

**Яҙыу**

- текстан һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу оҫталығы, күнегеүҙәр эшләү;
- яҙма телмәр нигеҙҙәре: байрам менән ҡотлау, шәхси хат яҙыу, открыткалар эшләү.

**Тел саралары һәм уларҙы ҡулланыу күнекмәләре.**

1. Графика, каллиграфия, орфография.
   Башҡорт теленең алфавиты. Йы, йе, йө, йү, йә ҡушымсалары. Өн һәм хәрефтең тап килеүе. Уҡыу ҡағиҙәләре. Төп орфографик ҡағиҙәләр. Һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы.

2. Телмәрҙең фонетик яғы.
   Башҡорт теленең специфик өндәрен дөрөҫ әйтеү һәм ишетеү. Төп орфоэпик нормалар. Башҡорт телендә баҫым. Һөйләмдең интонацион төрҙәре.

3. Телмәрҙең лексик яғы.
   Лексик берәмектәрҙе ике яҡлы (рецептив һәм продуктив) үҙләштереү, тотороҡло һүҙбәйләнештәр, телмәр этикеты элементтары булараҡ баһалау лексикаһы.Интернациональ һүҙҙәр. Һүҙьяһалыш.

4. Телмәрҙең грамматик яғы.
   Һөйләмдең төп коммуникатив төрҙәре: хәбәр, һорау, өндәү. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе, ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Исемдәрҙең һан һәм килеш менән үҙгәреше.Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. Башҡорт телендә эйәлек заты; ҡылым.ҡылымдарҙың зат һәм һәм һан менән үҙгәреше.
   Сифат дәрәжәләре.Алмаш һәм уның төрҙәре (зат, һорау, эйәлек, күрһәтеү). Синонимдар, антонимдар, омонимдар. Һан.

**Уҡыусыларҙың белем кимәленә талаптар;**

**Телмәр күнекмәләре**

1.Уҡытыусы уҡыған йәки һөйләгән, үҙе уҡыған тексты аңлай алыу; әҙ һөйләмдән торған диалогты аңлау, уны дауам итә белеү;
ә. Уҡыған әҫәр, картина, экскурсия, ҡараған диафильм буйынса әңгәмәлә ҡатнашыу;
- предметтың, күренеште элементар рәүештә һүрәтләү, уға үҙ мөнәсәбәтеңде булдырыу;
- хәбәр, һорау, өндәү һөйләмдәрҙе, поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән һөйләү;
- 3 – 5 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү;
- тиҙәйткестәрҙе, һынамыштарҙы шыма итеп әйтә белеү.
3.Тексты шыма, аңлы, тасуири уҡыу;
-текстың өлөштәренә, иллюстрацияларына исем биреү;
-текстан аңлашылмаған һүҙҙәрҙе табыу, мәғәнәләрен аңлатыу, һүҙлектәр менән эш итеү;
-хикәйә, әкиәт, мәҡәл, йомаҡ жанрҙарын айыра белеү.
4. ҙур булмаған һөйләмдәрҙе күсереп һәм яттан яҙыу;
- текст буйынса һорауҙарға яуап яҙыу;
-бер телдән икенсе телгә тәржемә итеү;
-өйрәтеү характерындағы изложение, иншалар яҙыу.
- яҙғанды элементар формала каммилаштыра алыу.
Уҡыу-уҡытыу программаһында планлаштарылған һөҙөмтәләрҙе үҙләштерелеүен баһалау
Класта һәм өйҙә башҡарыла торған яҙма эштәр өйрәтеү һәм тикшереү характерында була.
Уларға түбәндәгеләр инә:

- Башҡорт теленән төрлө типтағы күнегеүҙәр;
- тәржемә эштәре (башҡорт теленән рус теленә һәм киреһенсә);
- дәреслектәрҙәге әҙәби текстарға пландар төҙөү;
- һорауарға яҙма яуаптар һәм иншалар;
- тел һәм әҙәби материалдар буйынса аналитик һәм дөйөмләштереү тибындағы схемалар, проекттар һ.б. төҙөү.

Йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эше үткәрелә. Ағымдағы контроль күсереп яҙыуҙар программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы дәрестең бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Йыл аҙағында йомғаҡлау контроль эштәре мәктәп администрацияһы менән берлектә төҙөлгән график буйынса үткәрелә. Контроль эштәрҙе сиректең беренсе көнөндә һәм дүшәмбелә үткәреү тәҡдим ителмәй.

**Уҡыусыларҙың белемдәрен баһалау нормалары.**

**1. Балаларҙың уҡыу һәләтлектәрен баһалау.**

<u>*Уҡыу техникаһын тикшереү.*</u>

Ижекләп уҡыу күнекмәләрен формалаштырыу. Уҡыусының индивидуаль темпына ярашлы тиҙлек менән һүҙҙәрҙе тотош уҡыу. Һүҙҙәрҙе, һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе һәм ҡыҫҡа текстарҙы аңлы уҡыу. Дөрөҫ интонация һәм пауза менән уҡыу. Аңлы һәм тасуири уҡыу күнекмәләрен үҫтереү.

<u>*Ҡысҡырып уҡыу.*</u>

Ижекләп уҡыуҙан уҡыусының индивидуаль темпына ярашлы тиҙлек менән һүҙҙәрҙе аңлы рәүештә тотош уҡыуға күсеү. Уҡыу тиҙлеген эҙмә-эҙлекле үҫтереү.

<u>*Эстән уҡыу.*</u>

Эстән уҡығанда әҫәрҙең мәғәнәһен аңлау. Уҡыуҙың төрөн билдәләү. Текстан кәрәкле информация таба белеү.

Балаларҙың уҡыу тиҙлеге минутына түбәндәгесә билдәләнә:

| Класс | Һүҙ | Билдә | Эстән уҡыу |
|---|---|---|---|
| 5 | 60-70 | 230-250 | 95-110 |

***2. Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары.***

Яҙма эштәрҙең төрҙәре:

1) Бәләкәс күләмле текстарҙы күсереп яҙыу;
2) диктант;
3) тәржемә.

Һаналған яҙма эштәрҙең башланғыс кластарҙа үткәрелә торғандары элементар характерҙа, өйрәтеү маҡсатында һәм ныҡлы әҙерлектән һуң ғына яҙҙырыла. Әҙерлек эштәре төрлөсә булырға мөмкин: һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе яҙыр алдынан бер нисә тапҡыр телдән әйттереү, ниндәй хәрефтәр яҙылыуын анализлау, ҡағыҙәләрҙе ҡабатлау һ.б.

**Контроль характерҙағы яҙыу эштәренең һаны уҡыу йылы эсендә түбәндәгесә тәҡдим ителә:**

| Эш төрҙәре | 5 класс |
|---|---|
| Күсереп яҙыу | 2 |
| Һорауҙарға яуаптар яҙыу | - |
| Диктант | 2 |
| Изложение | - |
| Инша | - |
| **Бөтәһе** | **4** |

## 3.Календар - тематик план.

| № | Тема | Сәғәт | диктант | тәржемә | күсереп яҙыу |
|---|---|---|---|---|---|
| 1 | Һаумы, мәктәп! | 5 | | | 1 |
| 2 | Үҙем тураһында | 6 | | | |
| 3 | Йыл миҙгелдәре | 4 | 1 | | |
| 4 | Башҡортостанды беләһеңме? | 6 | | | 1 |
| 5 | Кеше. Тән ағзалары. Шәхси гигиена | 5 | | | |
| 6 | Кейем – һалым.Магазин. Өй. Баҙар. | 2 | | | |
| 7 | 8 март – ҡатын-ҡыҙҙар көнө | 2 | | | |
| 8 | Яҙ етте | 4 | 1 | | |
| 9 | Бөтәһе | 34 | 2 | | 2 |

**Ҡушымта 1.**

**Башҡорт (дәүләт) теле 5-се класс өсөн календарь-тематик план**

**Йылына -34 сәғәт, аҙнаһына-1сәғәт**

| № | Дәрес темаһы | Дәрес һаны | Дата | | Иҫкәрмә |
|---|---|---|---|---|---|
| | | | План. | Факт. | |
| | **Һаумы, мәктәп! – 5 сәғәт.** | | | | |
| 1 | Башҡорт теле дәрестәрендә хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре. Белем көнө. Үтелгәндәрҙе ҡабатлау | 1 | 01.09.20 | | |
| 2 | Ғ.Рамазанов "Йәшә, тыуған ерем!" Башҡорт теленең өн һәм хәрефтәре. | 1 | 08.09 | | |
| 3 | Ф.Ғөбәйҙуллина "Рәйфә мәктәпкә бара". Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар | 1 | 15.09 | | |
| 4 | А. Игебаев "Һау булығыҙ, аҡҡоштар!" Исемдең күплек ялғауы. **Инеш контроль эш. Күсереп яҙыу «Белем көнө»** | 1 | 22.09 | | |
| 5 | Беҙҙең мәктәп. Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе. | 1 | 29.09 | | |
| | **Үҙем тураһында – 6 сәғәт.** | | | | |
| 6 | Үҙем тураһында. Исемдәрҙең килеш менән үҙгәреше | 1 | 06.10 | | |
| 7 | Алтын көҙ. Һүҙлек менән эш | 1 | 13.10 | | |
| 8 | Беҙҙең ғаилә. **Проект эше «Беҙҙең ғаилә»** | 1 | 20.10 | | |
| 9 | Башҡортостан йылғалары. Яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәр. | 1 | 10.11 | | |
| 10 | Минең көн режимым. Ҡылым | 1 | 17.11 | | |
| 11 | Артурҙың бер көнө. Зат алмаштары | 1 | 24.11 | | |
| | **Йыл миҙгелдәре – 4 сәғәт** | | | | |
| 12 | Беҙ тәбиғәт менән бергә. Һорау алмаштары | 1 | 01.12 | | |
| 13 | К.Ушинский "Дүрт теләк". Алмаш | 1 | 08.12 | | |
| 14 | Йыл миҙгелдәре. Нығынған һүҙбәйләнештәр. | 1 | 15.12 | | |
| 15 | **Контроль диктант «Ҡыш яҡынлаша»** | 1 | 22.12 | | |
| | **Башҡортостаныңды беләһеңме? – 6 сәғәт.** | | | | |
| 16 | Хаталар өҫтөндә эш. С.Әлибаев "Тыуған ерем" | 1 | 29.12 | | |
| 17 | Тыуған ерем – Башҡортостан. Ҡушма исемдәр | 1 | 19.01 | | |

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| 18 | Ф.Ғөбәйҙуллина “Башҡортостан флагы”. | 1 | 26.01 | | |
| 19 | С.Юлаев “Уралым”. Яңғыҙлыҡ исемдәр. **Проект эше «Өфө ҡалаһы»** | 1 | 02.02 | | |
| 20 | Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһы – Өфө. | 1 | 09.02 | | |
| 21 | Үтелгәндәргә ҡабатлау. **Күсереп яҙыу “Өфө”** | 1 | 16.02 | | |
| | **Кеше.Тән ағзалары. Шәхси гигиена -2 сәғәт.** | 1 | | | |
| 22 | Хаталар өҫтөндә эш. И.Ғүмәрова “Унған ҡыҙ”. Сифат | 1 | 02.03 | | |
| 23 | Шәхси гигиена. | 1 | 09.03 | | |
| | **Яңы йыл менән -2 с**әғәт. | | | | |
| 24 | Ф.Иҫәнғолов “Алдаҡсы йондоҙҙар”. Исемдәрҙең күплек ялғауҙары | 1 | 16.03 | | |
| 25 | З.Биишева “Ауырыуҙан ҡотолдо” Үтелгәндәргә ҡабатлау | 1 | 23.03 | | |
| | **Аҙыҡ-түлек. Кейем-һалым. Магазин – 2 сәғәт.** | | | | |
| 26 | Г.Ғәлиева. Икмәк.<br>Исемдең күплек ялғауҙары | 1 | 06.04 | | |
| 27 | Ф.Туғыҙбаева “Яңы күлдәк”. Синонимдар | 1 | 13.04 | | |
| | **8 март – ҡатын – ҡыҙҙар байрамы – 2 сәғәт.** | | | | |
| 28 | Ф.Мөхәмәтйәнов<br>“Әсәйем” Антонимдар. **Проект эше « Минең әсәйем»** | 1 | 20.04 | | |
| 29 | Ә.Ихсан ”Әсә рәхмәте”. Үтелгәндәргә ҡабатлау | 1 | 27.04 | | |
| | **Яҙ етте – 4 сәғәт.** | | | | |
| 30 | Ф. Рәхимғолова ” Еңеү көнө” | 1 | 04.05 | | |
| 31 | С.Әлибаев “Һаумы, йәй!” Сифат | 1 | 11.05 | | |
| 32 | **Контроль диктант «Һабантуй»** | 1 | 18.05 | | |
| 33 | Хаталар өҫтөндә эш. Үтелгәндәргә ҡабатлау. | 1 | 25.05 | | |
| 34 | Үтелгәндәргә ҡабатлау. | 1 | | | |

**Иҫкәрмә:** план буйынса – 34 сәғәт, фактик – 33 сәғәт (1 сәғәт – Ватанды һаҡлаусылар көнө)

## Башҡорт теленән уҡыусыларҙың контроль эштәрен баһалау нормалары
## Контроль күсереп яҙыу текстарын баһалау

Башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе уҡыусылар өсөн дәрестәрҙә текстарҙы күсереп яҙыу киң ҡулланыла. Уҡыусылар дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләрен иҫкә төшөрәләр, бигерәк тә башҡорт телендәге үҙенсәлекле хәрефтәрҙе, үтелгән орфограмманы ғәмәлдә ҡулланырға, һүҙҙәрҙе юлдан-юлға дөрөҫ күсерергә, һүҙҙәрҙе уҡып яҙма телмәрҙә хатаһыҙ яҙырға өйрәнәләр. Күп тапҡырҙар яҙыу һөҙөмтәһендә, балаларҙа дөрөҫ яҙыу күнекмәләре барлыҡҡа килә. Шулай уҡ күсереп яҙыу эше уҡыусыларҙың иғтибарын, хәтерен үҫтереүгә булышлыҡ итә.

Күсереп яҙыу текстары дәрестә үтелгән грамматик һәм лексик темалар менән бәйле алына. Күсереп яҙғанда текст һәр уҡыусының алдында булырға тейеш. Индивидуаль карточкалар, дәреслектән күнегеүҙәр алынырға мөмкин. Әгәр ҙә өҫтәлмә эш алынмаһа, күсереп яҙыу тексы бер генә билдә менән баһалана.

**«5» билдәһе** төҙәтеүҙәр, бысратыуҙар булмаған, йә 1 пунктуацион хата булған эшкә,

**«4» билдәһе** 2 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 4 пунктуациоң, йә орфографик хатаһыҙ, 6 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 3 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

**«3» билдәһе** 3 орфографик, 4 пунктуацион йә 7 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 2 орфографик, 4 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

Әгәр тексты күсереп яҙыуҙан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.

**Грамматик биремдәрҙе баһалағанда** түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:

**«5» билдәһе** бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,

**«4» билдәһе** эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,

**«3» билдәһе** яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,

## Диктанттарҙы баһалау

Уҡытыусы тексты уҡып сыға. Өйрәнелмәгән орфограммалы һүҙҙәр алдан уҡ таҡтала яҙылған булырға тейеш. Уҡытыусы синыфтың әҙерлегенә ҡарап, әйтеп яҙҙырыу темпын үҙе билдәләй.

Тексты орфоэпия, әҙәби тел нормаларына ярашлы уҡыу талап ителә. Уҡытыусыға ярҙам итеү маҡсатында йыйынтыҡ авторҙары текстар аҙағында грамматик эш төрҙәре тәҡдим итәләр.

Диктант яҙылып бөткәс, уҡыусыларға тексты уҡып һәм тикшереп сығыу рөхсәт ителә. Ләкин диктантты баштан уҡ уйлап, аңлап, иғтибарлы яҙырға өйрәтергә һәм һуңғы тикшертеү менән мауыҡмаҫҡа кәрәк. Уҡытыусы тексты икенсе тапҡыр тулы килеш уҡып сыҡҡас, грамматик эш тәҡдим ителергә тейеш.

Контроль диктантты тикшергәндә, түбәндәге хаталар төҙәтелә, ләкин баһалағанда иҫәпкә алынмай:

1) мәктәп программаһына индерелмәгән ҡағиҙәгә яҙылыштар;
2) әле үтелмәгән ҡағиҙәгә яһалған хаталар;
3) автор ҡуйған ҡатмарлы пунктуацияға хаталар;
4) механик рәүештә бер хәреф урынына икенсеһен яҙыу.

Диктантҡа билдә ҡуйғанда шулай уҡ хаталарҙың характерына иғтибар итергә кәрәк. Хаталарҙы иҫәпләгәндә тупаҫ булмағандары, йәғни грамоталылыкты билдәләү өсөн әһәмиәте юҡтары, айырым билдәләнә. Бындай хаталарҙың икеһе берәүгә иҫәпләнә.

### Түбәндәге хаталар тупаҫ булмаған хаталарға инә:

1) ҡағиҙәләрҙең иҫкәрмәләренә ҡараған хаталар;
2) бәйләү юлы менән яһалған ҡушма яңғыҙлыҡ атамаларҙа ҙур хәрефтең яҙылышына хаталар;

3) бер тыныш билдәһе урынына икенсеһен ҡуйыу;
4) үҙләштерелгән һүҙҙәрҙең ялғауҙары яҙылышына хаталар.
Әгәр ҙә өҫтәлмә эш алынмаһа, диктант бер генә билдә менән баһалана.
**«5» билдәһе** тупаҫ булмаған 1 орфографик, 2 пунктуацион хата булған эшкә,
**«4» билдәһе** 4 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 6 пунктуациоң, йә орфографик хатаһыҙ, 7 пунктуацион хатаһы булған диктантҡа ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 5 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
**«3» билдәһе** 6 орфографик, 6 пунктуацион йә 3 орфографик, 9 пунктуацион, йә 12 пунктуацион хаталы эшкә ҡуйыла. Әгәр эштә өс бер типтағы хата ебәрелһә, 8 орфографик, 8 пунктуацион хаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.
Әгәр контроль диктанттан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.
**Грамматик биремдәрҙе баһалағанда** түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:
**«5» билдәһе** бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,
**«4» билдәһе** эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,
**«3» билдәһе** яртыһынан әҙерәге дөрөҫ эшләнгәндә.

**Ҡушымта 2.**

**Башҡорт теленән 5 класс уҡыусыларының белемен баһалау өсөн контроль эштәр.**

1. **Инеш контроль эш. Күсереп яҙыу “Белем көнө”** (дәреслек 5-се бит)
Маҡсаты: уҡыусыларҙың белемдәрен тикшереү.

**Белем көнө.**

Беренсе сентябрь – Белем көнө. Ул беҙҙең илдә иң тантаналы көн. Был көндө мәктәптәрҙә яңы уҡыу йылы башлана. Уҡыусылар байрамса кейенеп, сәскәләр тотоп мәктәпкә килә.

- Һаумыһығыҙ, балалар! Бөгөн – Белем көнө.Һеҙҙе байрам менән ҡотлайым! Яңы уҡыу йылы ҡотло булһын! Тырышып уҡығыҙ, белем алығыҙ!

**2.Контроль диктант “Ҡыш яҡынлаша”** (диктант һәм изложениелар йыйынтығы 18-се бит)
Маҡсаты: «Ҡыш» темаһына һүҙҙәрҙе дөрөҫ яҙыу күнекмәләрен, һүҙлек эшен тикшереү.

**Ҡыш яҡынлаша.**

Көндәр һалҡынайҙы. Күк йөҙөн һоро болоттар ҡапланы. Ҡар ҡатыш һалҡын ямғырҙар яуа. Һыуыҡтан бөжәктәр ҙә, ҡоштар ҙа ҡурҡа. Ҡоштар йылы яҡҡа осоп китте. Күбәләктәр ағас ярыҡтарына йәшеренә. Бөжәктәр ҡойолған япраҡтар аҫтында ҡышлай. Күп йәнлектәр ҡышҡа йөндәрен алмаштыра. Көҙ аҙағында балыҡтар йылға һәм күлдәрҙең төбөнә төшә.(49 һүҙ)
*Өҫтәлмә эш: текстан «Ҡыш» темаһына һүҙҙәрҙе яҙырға, тәржемә итергә.*

**3.Күсереп яҙыу “Өфө”** (дәреслек 80-се бит)

**Өфө.**

Өфө – бик боронғо ҡала. Ҡала эргәһенән Ағиҙел, Ҡариҙел, Дим йылғалары аға. Элек башҡорттар Өфөнө “Имән ҡала” тип атаған. Өфөлә Тыуған яҡты өйрәнеү музейы, М.В.Нестеров исемендәге Художество музейы, халыҡ шағиры М.Ғафуриҙың йорт-музейы бар. Ҡалала алты театр эшләй, ундан ашыу юғары уҡыу йорто бар, мәктәптәр, техникумдар, колледждар бик күп.Ағиҙел ярының иң бейек урынына салауат Юлаевҡа һәйкәл ҡуйылған.Дуҫлыҡ монументы бар. Өфө ҡалаһы матурлана, үҫә.

**4.Контроль диктант “Һабантуй”** (диктант һәм изложениелар йыйынтығы 23-сө бит)

Һабантуй – яҙғы хеҙмәт байрамы. Ҡырҙа сәсеү эштәре бөткәс, күңелле байрам етә. Ярыштар, уйындар, йыр-бейеүҙәр – ҡарап тороуҙары күңелле! Һабантуйҙа ат сабыштыралар, көрәшәләр, йыр, бейеү ярыштары ойошторалар, йүгерәләр, ҡолғаға үрмәләйҙәр. Еңеүселәрҙе бүләкләйҙәр. Һабантуйҙа балалар ҙа актив ҡатнаша.(36 һүҙ)

**Ҡулланылған әҙәбиәт исемлеге**

1.**Башҡорт теле:** уҡытыу рус телендә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 5-се класы өсөн башҡорт телен (дәүләт теле булараҡ) өйрәнеү өсөн уҡыу ҡулланмаһы. – 2-се баҫма / З.М.Ғәбитова, М.Ғ.Усманова. – Өфө: Китап, 2017.

2.Ғәбитова З.М., Баһауетдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н., Йәғәфәров Р.Ғ, Рус телле мәктәптәрҙә башҡорт телен уҡытыу: Методик күрһәтмә. – Өфө: БМҮИ, 2008.

3. Усманова М.Ғ., Ғәбитова З.М. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы: Уҡытыу урыҫ телендә алып барылған мәктәптәрҙең 5-11 синыф уҡытыусылары өсөн ҡулланма. – Өфө: Китап, 2009.